*Гүмеүр БАТТАЛОВА*

# ХАРИС БАТЫР

Ҡарт Ҡаратау,
Һинән аҡыллыраҡ,
Сабырыраҡ юҡтыр донъяла.
Һиңә ҡайтһам, ҡалам уйсанланып,
Түҙемһеҙлегемдән оялам…
*Рәми Ғарипов*

*…Кеше сабый сағында һәм сәстәренә сал төшкәс кенә тормоштоң асылын аңлауға якынырак була тиҙәр. Ҡайҙан килгәнбеҙ? Ҡайҙа китәбеҙ? Бөтәбеҙ ҙә Ер-әсәнән яралғанбыҙ, мәңгелеккә лә ул үҙ косағына аласак. Ошо арауыкта тормоштоң асылмаҫ серҙәренә аскыс эҙләйбеҙ, дөрөҫлөк даулайбыҙ… Ә иң ауыр мәлдәрҙә йәшәү көсө биргән, тәпәй баҫкан ергә кире кайтабыҙ…*

*Кеше тыуған ерендә генә күңел тыныслығы таба. Ғәзиз ереңде күңел түрендә йөрөткәндә тыуған төбәгеңдә йәшәү, бәлки, мотлак та түгелдер. Бөйөк ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған Төркиәлә эшләп, башкорт халкының данын бөтә ғәләмгә тараткан һымак, көрәшсе һәм тренер, Салауат районының Аркауыл ауылында тыуып үҫеп, Силәбе калаһында йәшәгән Харис Монасип улы Йосопов та башкорт көрәшен донъя кимәленә күтәргән.*



...Бәләкәй сағында Харис йыш ҡына тәҙрә аша ҡарап торорға ярата. Әсәһе аптырап: «Улым, һин ҡайҙа? Нимә тураһында уйлайһың?» — тип һорай. Ә ул ишетмәй ҙә, хыял диңгеҙендә йөҙә. Уның барлыҡ һөнәрҙәргә лә эйә булғыһы килә: осоусы, танкист, йырсы... Аслыҡ, ялангаслыҡ бөтә хыялдарын селпәрәмә килтерһә лә, Харистың ынтылышын һүндерә алмай. Уның эсендә бөгөн дә, үҙе әйтмешләй, ҡайнар ҡаҙандағы кеүек, бөтмәҫ көс-ғәйрәт урғый.

— Мин тормошта изгелекте лә, яуызлыҡты ла күп күрҙем, — тип башланы һүҙен Харис ағай. — Донъяла үҙеңде ҡасан кеше итеп һанарға мөмкин? Уйлап ҡарайым да, тракторсы булһам да Социалистик Хеҙмәт Геройы булыр инем, тим, сөнки мин үҙемдең юлымды беләм. Әгәр ҙә алдыңа бер маҡсат алдыңмы, һәр ваҡыт уға ынтылырға кәрәк. Был маҡтаныу түгел. Һәр кешенең үҙ юлы булырға тейеш. Ниңә бөтә кешеләр ҙә бер төрлө йәшәргә тейеш? Тауҙар бар икән, тауға үрмәләргә кәрәк. Тауҙан төшәләр, тағы ла менәләр. Улар шуның өсөн яратылған. Мин үҙем шулай йәшәйем: менәм, төшәм...



Тормош ул көрәш... Харис Монасип улы Йосопов был фекерҙе ишеткәндә дөйөм йәшәйеште түгел, үҙенең тормошон күҙ алдынан үткәрә. Ысынлап та, көрәш — уның тормошо. Үҙен белә башлағандан бирле уның бөтә ғүмере көрәш менән бәйле: милли көрәш, самбо, дзюдо, грек-рим көрәше, ирекле көрәш...

Хәйер, Харис Монасип улының барлыҡ нәҫел-нәсәбенең тормошо ла милли көрәшкә барып тоташа. Атаһы һабантуйҙарҙа бил бирмәҫ бәһлеүән, йырсы була. РСФСР-ҙың халыҡ артисы Хәбир Ғәлимов уның тауышын һандуғас һайрауы менән сағыштырған. Олатаһы Йосоп Низамовтың ауырлығы 120 килограмм булған. Ундай кәүҙә менән нисек көрәшмәйһең инде? Ҡартатаһының атаһы Низам, уның атаһы Бураншаға тиң көрәшсене тирә-яҡта хәтерләмәйҙәр. Ике метр буйлыҡ баһадир һабантуйҙа дәғүәсеһен әллә ҡайҙа торған аҙбарға сөйөп ебәргән тиҙәр. «Батырҙан батыр тыуа», ти бит халыҡ.

Ғәйрәтле ир-уҙамандарҙың таҫыл хәрәкәттәрен күҙәтеп үҫкән баланың күңелендә башҡорт халҡының бөтә булмышын үҙ эсенә һыйҙырған, өс тағандың бер таяуы булған милли көрәшкә һөйөү ғүмерлеккә урын ала. Һабантуйҙарҙа оҫталығы уға еткән батыр табылмай, ә ҙур көрәш майҙанына хәрби хеҙмәткә алынғас сыға Харис. Беренсе ярышта уҡ бөтәһен дә бер үк алым менән — күкрәк аша ташлап еңеүсе булып танылa. Харис Йосопов 1954 йылда тәүге тапҡыр Силәбе өлкәһе һабантуйында беренсе урынды яулай. Һуңынан ун дүрт йыл буйы ул милли көрәш буйынса алдынғылыҡты бирмәй. Ә 1959 йылда Бөтә Рәсәй ярыштарында чемпион исеменә лайыҡ була.

Көрәште ихлас үҙ иткән Искәндәр Миһранов ағай бына нимә тине:

«Мин Харис ағайҙың йәш сағында уҡ оҫта көрәшкәнен яҡшы хәтерләйем. Үҙе ҙур белемгә эйә

булып, яҡташтарына ла күп ярҙам итте. Уға ҡарап байтаҡ йәштәр спортты һөнәр итте».

Көс-ғәйрәте ташып торған, сабый сағынан башҡорт рухлы, милли солғанышта йәшәгән, йырсылар нәҫеленән булған Харис батыр Башҡорт театр училищеһына уҡырға инә. Беренсе курсты тамамлағас, аҡсаһы булмау сәбәпле, уҡыуын артабан дауам итә алмай. Халҡының айырылмаҫ юлдашы — йөрәктәрҙе өҙөр моң-зарға мөлдөрәмә тулы йырҙар уның күңел йыуанысы, иң яҡын дуҫына әйләнә. Аҙаҡ, йылдар үткәс, моңло тауышлы башҡорт батырының сығыштарын Силәбе тамашасыһы алҡыштарға күмеп ҡаршы аласаҡ... Ә әлегә ул, 200 килограмлыҡ атты күтәреп, тиҫтерҙәренең һушын ала. Ауылдан егерме саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Ҡаратауға утынға йөрөй.

— Шәмбе көн Ҡаратауға утынға бара торғайныҡ, — тип хәтерләй Харис ағай. — Ауылдан 20 саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡан урманға барып ике өйгә аҙнаға етерлек утын алып ҡайтам. Шулай, март айы ине, буран сыҡты. Бер килгәндә күберәк алып ҡайтайым тип, утынды күп итеп тейәгәнмен. Ат ҡарҙан сыға алмай. Уны төртөп йығам да, күтәреп торғоҙам. Этләнә торғас сананы бушаттым. Ул арала төн уртаһы булып китте. Утынды урмандан сығарғанда ғына ауыр. Килгәндә гел тауға үрләһәң, ҡайтҡанда юл гел тау түбән. Йырлап ҡайтып бара инем, ат туҡтап бышҡыра башланы. Ҡараһам, алда уттар күренә. Арҡауылға ҡайтып етеп барам тип уйлайым. Ат алға бармай. Иҫкә килеп төштө: моғайын, бүреләрҙер! Күҙҙәре ут кеүек яна. Нимә эшләргә? Улар күп, ә балта йөк аҫтында. Ҡысҡырам, ут яғыр инем, шырпы юҡ. Бер ваҡыт былар әкрен генә китә башланы... Бүреләр минең ҡаршы торорға әҙер булыуымды һиҙгәндәрҙер, хәйер, бүреләр генә түгел, кешеләр ҙә үҙ маҡсатына ирешер юлда бөтә кәртәләрҙе емерергә әҙер тороусылар алдында баҙап ҡала.

Йосоп Монасип улының уҡытыусыһы Сәймә Фәйзуллина апай һөйләгәндәрҙән:

— 10-сы кластарға дәрес бирергә барып инһәм, бер ҙур малай ултыра. Ул Харис исемле икән. «Армияға киткәнсе аттестат алып өлгөрмәгәйнем, бына хәҙер уҡырға булдым», ти. Кластағы башҡа малайҙар унан күпкә кесерәк. Харисҡа ҡурҡып ҡына ҡарайҙар. Ә ул тәнәфес ваҡытында уҡыусылар араһында ярыштар ойоштора. Шулай беҙҙең мәктәп һәр төрлө бәйгеләрҙә призлы урындар ала башланы. Харис уларҙы, һеҙ һәр ваҡыт тик беренсе урындарҙы яуларға тейешһегеҙ, тип өйрәтә ине.

Йәй көндәрендә Харис ҡайҙа һабантуйға бара, тиҫтерҙәре лә уның артынан ҡалмай, уның еңеүен көтә. Харис уларҙың өмөтөн аҡлай, еңеп сыға. Ул көрәшеп алған һарыҡтарҙы һуйып, бергәләп табын ҡоралар.

...Үҙенең көсөнә ышанған егет Алма-Атаға юл алған еренән Силәбелә тороп ҡала. «Әҙәм балаһын яҙмыш йөрөтә», тиҙәр. Йәш батырҙың артабанғы тормошо боронғо башҡорт ерҙәрендә урынлашҡан һәм ике йөҙ меңгә яҡын милләттәшебеҙ йәшәгән тарихи ҡала менән үреләсәк. Таныш-белештәр булмаған ят ҡалала үҙ урыныңды табыуҙары еңелдән түгел. Ут ялҡыны ҡоросто сыныҡтырған кеүек, тормош һынауҙары ла кешеләрҙе түҙемлерәк, көслөрәк булырға өйрәтә. Силәбелә педагогия институтында уҡығанда Харис спорт менән ныҡлап шөғөлләнә башлай. Физкультура факультетында белем алған спортсыларҙан ҡалышырға теләмәй, башҡорт егеттәрендә дәрт тә, дарман да, тәүәккәллек тә барлығын иҫбат итергә тырыша. Харис Йосопов Башҡортостанға ҡайтып, Күмертау ҡалаһының мәҙәниәт һарайында классик көрәш буйынса тренер булып эшләй. Ләкин тормош йылғаһы гел генә беҙ теләгәнсә аҡмай. Яҡшы тренер булыу теләге менән янған Харис батыр кире Силәбегә юл ала.

— Кеше үҙе бер юлды тоторға тейеш. Мин барыбер кеше буласаҡмын тип ант иткәйнем. Ошо уйҙы көнөтөнө иҫкә төшөрөп торһаң, моратыңа ирешәһең. Мин үҙем тураһында уйламаным, иң элек халҡым тураһында уйланым... Башҡорт халҡы бер халыҡтан да кәм түгел. Шундай уйҙар менән йәшәнем, шул юл менән барҙым. Бик ауыр юл был, әлбиттә, бик ауыр, — ти Харис ағай.

ләр. Тағы ла бөтәһен дә яңынан башларға... Дзюдо самбоға ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ. Самбо буйынса донъя беренселегендә 5-6 кеше ҡатнашһа, дзюдо буйынса 150-200 спортсы көс һынаша. Ләкин Харис Монасип улы еңел юлды һайлай торған кеше түгел. Халҡының арҙаҡлы улдарына ғына хас тәүәккәллек менән ул ҡабат яңы эшкә сума. Бер нисә йылдан



Хеҙмәт юлын Силәбе ҡалаһының «Спартак» спорт йәмғиәтендә тренер булып башлаған өмөтлө йәш белгес өлкәнең «Динамо» спорт советында өлкән тренер булып эшләй башлай. Ифрат ҙур көс талап иткән, маҡсатына илтер ҡатмарлы юл ошонан башлана. Милли көрәштә бил бирмәгән Харис Йосопов ирекле көрәш, самбо менән шөғөлләнә. Силәбе өлкәһендә самбо буйынса беренсе спорт мастеры Рәсәйҙә лә призлы урындарҙы бер кемгә лә бирмәй. Ә уның ҡул аҫтында шөғөлләнгән 15 спортсыны беренсе йылда уҡ самбо буйынса СССР-ҙың йыйылма командаһына алалар.

1964 йылда, дзюдо Олимпия уйындары төрҙәренә индерелгәс, илдең бөтә төбәктәрендә эшләгән көслө тренерҙарҙы йыйып, дзюдо менән шөғөлләнергә тәҡдим итәдзюдоны бер кем дә беҙҙең кеүек белмәй тип иҫәпләгән япондар менән татамиға көс һынашырға Йосоповтың уҡыусылары сыға. Силәбе спортсылары халыҡ-ара ярыштарҙа чемпион исеменә лайыҡ булыр тип кем уйлаған да, кем фаразланған?

— Ул ваҡытта бер спорт мастерын әҙерләү өсөн уртаса ун йыл кәрәк ине, ә мин ул юлды күпкә ҡыҫҡарттым, — ти Харис Монасип улы. — Ҡайһы бер егеттәр 2-3 йыл эсендә спорт мастеры исемен алды. Нисек тиһегеҙме? Әгәр ҙә элек улар аҙнаһына 3 мәртәбә шөғөлләнһә, миндә улар 6-9 тапҡыр шөғөлләнә. Кешеләрҙе ыҙалатаһың, тиҙәр, ә мин, киреһенсә, уларҙың ҙур спортҡа килеү юлын ҡыҫҡартам. Минең шундай малайҙар бар ине — уларҙы спорт залынан

ҡыуып та сығарып булмай. Мин ҡайтып китһәм, улар тәҙрәнән кереп тағы ла шөғөлләнә. Уларҙың башына сая уй-хыялды керетһәң, бары шул уй менән йәшәйҙәр. Ә спорт хыялһыҙ булмай...

Малайҙарҙы теҙеп ҡуям да, әйтә торғайным: мин һеҙҙең аралағы илле кешенең унаһының чемпион булырына ышанам, ә һеҙ үҙегеҙҙең көсөгөҙгә ышанаһығыҙмы, тим...

...Бары тик еңеүҙе генә таныған тренерҙың уҡыусылары төрлө бәйгеләрҙә көс һынаша башлай. Харьковта үсмерҙәр араһында үткән беренселектә ҡатнашыусы команданың яртыһы — Йосоповтың уҡыусылары була. Әлегә тиклем был төр ярыштарҙа беренсе урындарҙы яулаған грузиндар асыуын йәшермәй, «Һин ҡайҙан килеп сыҡтың?» тип уға ябырыла. Ә «Советский спорт» гәзитенең хәбәрсеһе: «Әгәр тренер бер чемпион әҙерләһә, ул уңды, тиҙәр, ә был осраҡта Харис Йосоповтың мәктәбе тураһында һөйләргә кәрәк», — тип яҙа. Көньяҡ Уралдағы дзюдо мәктәбенә нигеҙ һалған бөйөк тренерҙың бөтә донъяла данлы юлы ошонда башлана. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары исемлегенә яңы сағыу исем өҫтәлә — Харис батыр. Курсташы, журналист Урал Сафиуллиндың уға арнап яҙған шиғырында шундай юлдар бар:

*Моратыңа еттең инде,*
*Харис Йосоп,*
*Даның бик ҙур, Ер шарында*
*йөрөй осоп,*
*Тере сакта үҙ-үҙеңә һәйкәл*
*һалдың,*
*Батырҙарҙың араһына кереп*
*калдың.*

— Минең Силәбе спортсылары Рәсәйҙең бөтә тренерҙары, спортсыларынан айырылып тора, — ти Харис Йосопов. — Үҙем дүрт спорт төрө менән шөғөлләнгәс (милли, ирекле көрәш, самбо, дзюдо), бер ваҡытта ла был алым яҡшы, быныһы насар тип әйткәнем булманы. Бер нисә ай эсендә иң төп алымдарҙы күрһәтәм, улар оҡшағанын һайлап ала ла шөғөлләнә. Бөтәһе лә бер үк юл менән китергә тейеш түгел, сөнки кешеләр ҙә бер төрлө түгел бит.

Урал дәүләт физик тәрбиә биреү академияһы профессоры, һикһәндән ашыу ғилми хеҙмәт авторы Харис Монасип улы Йосопов ун ете йыл буйы дзюдо һәм башҡа көрәш төрҙәре буйынса СССР-ҙың йыйылма командаһы тренеры була. Ул СССР-ҙың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, милли, грек-рим һәм ирекле көрәш буйынса спорт мастеры, атҡаҙанған физкультура хеҙмәткәре, Бөтә Союз категориялы судья, дзюдо буйынса 7-се дан эйәһе. Харис Монасип улы үҙенең көрәш мәктәбендә спорт мастеры дәрәжәһенә күтәрелгән 350 спортсыны тәрбиәләгән. Бөтә донъяла танылыу яулаған тренер үҙенең уҡыусылары — халыҡ-ара класлы 14 спорт мастеры, 10 — Европа, 2 донъя чемпионы менән айырыуса ғорурлана.

Йөҙҙән ашыу миҙал менән бүләкләнгән, дүрт тапҡыр Европа чемпионы, ике рәт донъя кубогы яулаған, туғыҙ тапҡыр СССР чемпионы, халыҡ-ара турнирҙарҙа утыҙ ике тапҡыр еңеп сыҡҡан Олимпия уйындары призеры Григорий Веричев та Харис Монасип улының уҡыусыһы.

Йосопов мәктәбе тураһында ишетеп, илебеҙҙең барлыҡ төбәктәренән бөйөк тренерҙа шөғөлләнергә теләүсе спортсылар Көньяҡ Уралға — Силәбе ҡалаһына юллана. Уның мәктәбендә ҡырҡ алты милләт вәкиле шөғөлләнә. Осетин егете Виктор Битанов Йосопов мәктәбенә 1971 йылда килә һәм совет спортсылары араһында дзюдо буйынса тәүге донъя чемпионы исеменә лайыҡ була.

Виктор Битанов үҙенең уҡытыусыһы хаҡында бына нимә ти:

— Мин Харис Монасип улына сикһеҙ рәхмәтлемен. Ул минең өсөн тренер ғына түгел, атайым һымаҡ. Беҙгә күп ваҡыт күнекмәләрҙә бергә булырға, бергә сығыш яһарға тура килде. Харис Монасип улы һәр саҡ эргәңдә, уға ышанаһың. Ул оҫта педагог, психолог һәм заманыбыҙҙың бөйөк тренеры, бар донъяға билдәле

көрәшселәр мәктәбен булдырған шәхес. Мин үҙем Силәбелә ҡырҡ йылға яҡын йәшәйем, ул нигеҙ һалған спорт мәктәбе йылдан-йыл сәскә ата. Ул спортсыларҙы бер-береһенә яҡшы мөнәсәбәттә тәрбиәләй, уҡыусылары ғүмер буйына уның традицияларына тоғро ҡала.

...Көслө уҡытыусы ғына йөҙәрләгән кеше араһынан һәр һүҙен, хатта тын алышын аңлаған уҡыусыһын таба һәм унда үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләй алалыр. Тренерҙың талапсанлығы, спортсының еңеү дәрте менән яныуы тәү шарт. Иң мөһиме, татамиға сыҡҡас, донъя мәшәҡәттәрен оноторға кәрәк, сөнки спортта һәр секунд ҡәҙерле. Ҡаҙағстанда СССР беренселегенә өсөн барған ярыштарҙа Виталий Битанов еңелеүен һиҙә. Тағы ла ун секунд һәм... «Бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, көсҡеүәтенде йый, үҙеңде ҡулға ал, һин бары еңергә тейешһең», — тренеры Йосоповтың был һүҙҙәре спортсының ҡанына һеңгән. «Юҡ, еңмәһәм дә, еңелмәйәсәкмен...» Судья алышта бер кемдең дә еңмәүе тураһында хәбәр итә һәм Виталий һуштан яҙа...

1971 йылғы донъя чемпионатында япон спортсыһының температураһы 39 градусҡа тиклем күтәрелә. Ул туғыҙ тапҡыр татамиға сыға һәм чемпион исеменә лайыҡ була. Спортсыла үҙенең көсөнә ышаныс тәрбиәләү — тренерҙың төп бурыстарының береһе.

Дзюдо буйынса СССР чемпионы Вячеслав Попов:

— Харис Монасип улы аҡыллы тренер, күп яҡлы шәхес. Әгәр тәүҙә ул ябай тренер булып, еңергә өйрәтһә, артабан тик алтын миҙал ғына яуларға ынтылыш бирҙе. Күңеле тулы рухи хазина уның. Сикһеҙ дәрт-дарманы моңло йырҙарында, үҙенсәлекле шиғриәтендә сағыла. Ерҙе йәмләп, тәбиғәттең хозурлығын татып, күркәм итеп йәшәй белә.

Силәбе ерендә биш йыл рәттән СССР-ҙың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, профессор Харис Йосопов призына халыҡ-ара турнир ойошторола. Унда илебеҙҙең иң көслө дзюдосылары көс һынаша. Татамиға Урал, Волга буйы, Себер, Ҡаҙағстандан килгән, халыҡ-ара ярыштарҙа, Рәсәй беренселегендә еңеү яулаған халыҡ-ара класлы спорт мастерҙары сыға. Иң мөһиме — Харис Йосопов нигеҙ һалған, донъяла билдәлелек алған дзюдо мәктәбендә шөғөлләнеүселәр еңелеү белмәй. Хәҙер башҡорт батыры тәрбиәләгән спортсыларҙың уҡыусылары, үҙҙәре тренер булып, ҙур уңыштарға ирешә.

Харис Монасип улын уҡыусылары ихтирам итеп «Атай Ю» тип йөрөтә. Улай ғына ла түгел, бөтә Силәбе ҡалаһы халҡы уға оло хөрмәт менән ҡарай. Ун биш йыл дауамында өлкәнең абруйлы тренеры, «Йыл кешеһе» исеменә лайыҡ булыуы ла ошо хаҡта һөйләй. Хәҙер уның ун алты уҡыусыһы Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры исемен йөрөтә.

Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Александр Миллерҙың һүҙҙәре быны тағы бер раҫлай.

— Харис Йосопов үҙе лә, уның исеме лә Көньяҡ Уралда көрәш, самбо, грек-рим көрәше, дзюдо тарихында оло бер күренеш. Уның девизы ла — юғары сифат, алтын миҙал! Мин Силәбе физкультура институтына уҡырға ингәндә ул кафедра мөдире ине. Беҙ, йәш тренерҙар, унан бик күп нәмәгә өйрәндек, әле лә өйрәнәбеҙ. Ә ул йылдарҙа Харис Монасип улы юл башлаусы, өлгө күрһәтеүсе ине. Ул Рәсәй, СССР, Европа, донъя спортындағы бөйөк көрәшсе һәм шәхес. Тәүҙә үҙе еңеүҙәр яулаһа, һуңынан уҡыусылары Силәбе өлкәһен, илебеҙҙе данға күмде. Минең өсөн ябай тренер ғына түгел, ә иң кешелекле, кеселекле шәхес ул. Шуға ла уның мәктәбен үткән көрәшселәр остаздың эшен генә түгел, иң яҡшы сифаттарын башҡаларҙа тәрбиәләй.

Өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Харис Монасип улының көсө ташып тора, йәштәргә бирер тәжрибәһе лә етерлек. Әлек спорттың буласаҡ йондоҙҙары «Динамо» спорт йәмғиәтенең ҡырҡ квадрат

метрҙы билгән бүлмәһендә шөғөлләнһә, Харис Йосопов дзюдосылар өсөн айырым зал төҙөткән. Ул әле лә көн һайын сәғәт ярым спорт менән шөғөлләнә. Башҡорт халыҡ йырҙары яҙылған кассетаны магнитофонға ҡуя ла, таҫма бөткәнсе бер хәрәкәт эшләй, кассетаны алмаштыра ла икенсеһенә күсә. Бер ваҡытта ла үҙен халҡының бер өлөшө итеп тойоуҙан туҡтамаған Харис батыр тәүҙә Урал дәүләт физик тәрбиә биреү академияһында көрәш бүлеге ойоштороуға өлгәшә, уның тәүге етәксеһе була. Ә алты йылдан, уның тәҡдиме буйынса, милли көрәш бүлеге үҙ ишектәрен аса. Йыл һайын был бүлектә биш егет тамамлай.

— Егеттәрҙең күбеһе Башҡортостандан килде, — ти Харис Монасип улы. — Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сафакүл районларынан да бар. Бында уҡып бөткән егерме ике кеше спорт мастеры исемен алды. Ғөмүмән, көрәш тарихын алып ҡараһаң, милли көрәш менән шөғөлләнгән егеттәр танылған спортсы булып китә. Тәүҙә милли көрәш менән шөғөлләнгән Шамил Хисаметдинов әле Мәскәүҙә йәшәй, Олимпия уйындарында ҡатнашып чемпион булды. Ундай егеттәр бик күп. Миндә шөғөлләнгән Салауат Минһажев Советтар Союзы беренселегендә көмөш миҙал алды. Хәҙер яҡшы тренер.

Грузияла классик көрәштә еңгән батырҙар түгел, милли көрәштә бил бирмәгәндәр иң көслө кеше тип һанала. Улар айырым хөрмәткә лайыҡ. Беҙҙең республикала был спорт төрөнә һуңғы ваҡытта ғына ныҡлы иғтибар бүленә башланы. Харис Монасип улы иһә дүртенсе йыл тыуған ауылы Арҡауылда, Малаяҙҙа милли көрәш буйынса республика турнирҙарын үткәрә. Билдәле тренерҙың призына ойошторолған бәйгелә Урал төбәгенән егерменән артыҡ команда йыйыла. Еңеү сәме менән янған бәһлеүәндәрҙе был сараға бер кем дә көсләп саҡырмай. Һәр кеше йөрәге, күңеле ҡушыуы буйынса килә.

* * *

Йөрөгән юлдары оҙон, күргәндәре китап яҙырлыҡ ил ағаһын һәр ерҙә лә оло ихтирам менән ҡаршы алалар: Харис бей, Харис сенсей, мсье Харис, пан Харис, Харис батыр… Бер ваҡытта ла тыуған ерен, көсгәйрәт биргән Уралын, рух һәм иман саҡлылары уятҡан туған телен онотмаған баһадирға һуңғыһы ныҡыраҡ оҡшай — Харис батыр… Ауылынан батыр исеме алып сығып киткән йәш егет, даны артып, ил ағаһы булып, ҡәрҙәштәре янына йөрәге түрендә йөрөткән изге ниәтен тормошҡа ашырыу өсөн ҡайта. 1997 йылда Харис Монасип улы Арҡауылда мәсет төҙөү эшен башлап ебәрә. Уға был башланғысында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе улдары Морис менән Марсель ярҙам итә. Морис — атаһының уҡыусыһы, дзюдо буйынса Рәсәйҙең спорт мастеры. Марсель дә спортҡа битараф түгел. Тәүге ғаиләһендә ҡалған ҡыҙы Ирина — уҡытыусы. Улы Рөстәм — ижтимағи-сәйәси темаларға яҙыусы тележурналист. Харис ағайҙың ейәнейәнсәрҙәре лә тормошон ҙур спорт менән бәйләмәксе.

Ауылға иман нурҙары һибеүсе изге йорт Харис Йосопов исемен йөрөтә… Һуңлап булһа ла, батыр үҙ илендә лә танылыу тапты… Аллаға шөкөр, үҙе иҫән сағында…

Салауат районы үҙәгендәге Балалар ижад йортонда Харис Йосопов исемендәге спорт клубы эшләп килә. Район советы ҡарары менән Малаяҙҙағы үҙәк урамдарҙың береһенә лә 1997 йылда Арҡауыл батырының исеме бирелде. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың музейында профессор Харис Йосоповҡа арналған махсус бүлек тә бар.

…Йүрүҙәндә тәпәй баҫҡан, ҡөҙрәт алған Харис батыр яҙ етеү менән тағы ла милли көрәш буйынса ярыштар үткәреү өсөн Ҡаратау буйҙарына юл аласаҡ.

Ҡара ерек,
Йырлы Йүрүҙәнкәй,
Серле, хыялый, ҡырыҫ Ҡаратау,
Йәшәүҙе мин бары һеҙҙә тойҙом,
Мин бит һеҙҙе үлеп яратам…